**7-Р-2017**

**1. Башҡорт алфавитында нисә тартынҡы хәреф бар?**
а) 36;
б) 27;
в) 21;
г) 42.

**2. "*Ел бер аҙ баҫыла төштө, ... бөтөнлөй үк туктаманы" (Н. Мусин)* һөйләмендә нөктәләр урынына тейешле теркәүесте яҙ:**
а) ләкин;
б) бәлки;
в) ә;
г) әммә?

**3. *"Шунан ҡалған-боҫҡанынан үҙемә лә аҙ-маҙ өлөш сығарырмын" (З. Биишева)* һөйләмендәге сығарырмын ҡылымы ниндәй заманда килә?**
а) хәҙерге заман;
б) киләсәк заман;
в) шаһитһыҙ үткән заман;
г) шаһитлы үткән заман.

**4. *"Тырышлыҡ – ҙурлыҡ, ялҡаулыҡ – хурлыҡ"*. Мәҡәлдәге исемдәр ниндәй юл менән яһалған?**
а) аффиктар өҫтәү юлы менән;
б) һүҙҙәрҙе парлау юлы менән;
в) һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы менән;
г) һүҙҙәрҙе ҡабатлау юлы менән.

**5. *Бөгөн иртәнсәк беҙ Ғиниәтулла ағайымдарҙы оҙатырға станцияға килдек (Й.Солтанов)* һөйләмендә рәүеште табып, төркөмсәһен билдәләгеҙ:**
а) төп;
б) ваҡыт;
в) урын;
г) күләм-дәрәжә.

**6. Нимә ул «ҡарһүҙ»?**
а) «*ҡар*» һәм «*һүҙ»*ҙән яһалған ҡушма һүҙ;
б) боронғо кешеләрҙең донъяға ҡарашы;
в) әкиәт жанрының икенсе төрлө атамаһы;
г) халыҡ ижадының дөйөм атамаһы.

**7. *«Табаҡ та ғына табаҡ, ай, аҡ ҡағыҙ... »* Был юлдар ҡайһы йырҙан?**

а) «Урал»;
б) «Эскадрон»;
в) «Буранбай»;
г) «Ҡаһым түрә».

**8. М. Аҡмулланың тыуған ауылын, районын билдәләгеҙ**.
а) Ҡырмыҫҡалы районы, Ибраһим ауылы;
б) Өфө районы, Тирмән ауылы;
в) Белорет районы, Сермән ауылы;
г) Миәкә районы, Туҡһанбай ауылы.

**9. Мостай Кәримгә «Башҡортостандың халыҡ шағиры» исеме ҡасан бирелә**?
а) 1981 й.;
б) 1999 й.;
в) 1964 й.;
г) 1941 й..

**10. Рәшит Ниғмәтиҙең «Йәйге ямғыр» шиғырында төп һүрәтләү сараһын билдәләгеҙ.**
а) антитеза;
б) сағыштырыу;
в) эпитет;
г) йәнләндереү.

**2017/2018 укыу йылында башкорт теле һәм әҙәбиәтенән район кимәлендә уҙғарылған олимпиада өсөн тест һорауҙары**

**8-Р-2017**

**1. Үҙ аллы һүҙ төркөмдәрен тәшкил иткән юлды билдәләгеҙ:**
а) исем, ҡылым, рәүеш, киҫәксә;
б) исем, ҡылым, һан, бәйләүес;
в) исем, ҡылым, сифат, алмаш;
г) исем, ҡылым, сифат, хәл.

***2. Йылғаның яры* һүҙбәйләнешендә ҡайһы эйәртеүле бәйләнеш төрө ҡулланылған?**
а) ярашыу;
б) башҡарылыу;
в) йәнәшәлек;
г) һөйкәлеү.

**3. *“Унан ашыҡмай ғына һандыҡтың иң төбөнән иҫке ҡыҙыл бәрхәткә төрөлгән бер нәмә күтәреп сығарҙы” (З. Биишева)* һөйләмдә аныҡлаусыны табып, төрөн билдәләгеҙ:**
а) тиң аныҡлаусы;
б) тиң булмаған аныҡлаусы;
в) билдәһеҙ аныҡлаусы;
г) ҡушма аныҡлаусы.

**4. Һөҙөмтә, ҡаршы ҡуйыу, сәбәп теркәүестәре меннән бәйләнгән тиң киҫәктәр araһына ниндәй тыныш билдәһе ҡуйыла?**
а) өтөр;
б) нөктәле өтөр;
в) ике нөктә;
г) һыҙыҡ.

**5. *“Ул иҫтәлек өсөн күмәкләшеп рәсемгә төшөргә тәкдим итте” (М. Кәрим)* һөйләмендә килгән хәл әйтеменең төрөн билдәләгеҙ:**
а) рәүеш хәле;
б) маҡсат хәле;
в) сәбәп хәле:
г) ваҡыт хәле.

**6. «Ҡобайыр» һүҙенең мәғәнәһен билдәләгеҙ**.
а) тыуған ил тураһындағы йыр;
б) дан йырлау;
в) халыҡ йырының бер формаһы;
г) композитор ижад иткән әҫәр.

**7. Салауат Юлаев ижадын, тарихын өйрәнеүсе ғалимдарҙы билдәләгеҙ.**
а) Р.Игнатьев, В. Даль, Т. Беляев;
б) М. Кәрим, Н. Нәжми, Р. Бикбаев;
в) Т. Килмөхәмәтов, Р. Баимов, Ғ. Хөсәйенов;
г) И. Гвоздикова, В. Сидоров, М. Иҙелбаев.

**8. Нимә ул хикәйә?**
а) халыҡ ижады жанры;
б) мөһим бер ваҡиғаға арналған бәләкәй күләмле проза әҫәре;
в) мажаралы нәҫер;
г) романдың башланғыс өлөшө.

**9. «Башҡорт халҡына көйлө хитап» кемгә арналған?**
а) Салауат Юлаевҡа;
б) Шәһит Хоҙайбирҙинға;
в) Әхмәтзәки Вәлидигә;
г) Муса Мортазинға.

**10. Л.Н. Толстойҙың «Кешегә күпме ер кәрәк...» хикәйәһендә Пахомдың үлеү сәбәбен билдәләгеҙ**
а) башҡорт ерҙәренең ҙурлығынан;
б) Пахомдың ауырыуы сәбәбле;
в) нәфсе;
г) аяҡтарын сисеп атлауы.

**2017/2018 уҡыу йылында башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән район кимәлендә уҙғарылған олимпиада өсөн тест һорауҙары**

**9-Р-2017**

**1.** ***“Батыр бер үлә, ҡурҡаҡ ҡырҡ үлә” (Мәҡәл)*** **һөйләменең төрөн билдәләгеҙ.**
а) эйәртеүле ҡушма һөйләм;
б) теҙмә ҡушма һөйләм;
в) хәл әйтемле ябай һөйләм;
г) ҡатмарлы ҡушма төҙөлмәләр.

**2.** ***“Иҫеңдә тот: әсә хаҡынан да изге нәмә юҡ” (М. Кәрим).*** **Эйәрсән һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ.**
а) аныҡлаусы һөйләм;
б) тултырыусы һөйләм;
в) шарт һөйләм;
г) кире һөйләм.

**3.** ***“Цирк бөткәндә, бик һуң ине (...) ай батҡан, йондоҙҙар баҙлап ҡалҡҡан” (З.Биишева)*** **һөйләмендә йәйәләр урынына ниндәй тыныш билдәһе ҡуйыла?**
а) нөктәле өтөр;
б) өтөр;
в) ике нөктә;
г) һыҙыҡ.

**4. Бирелгән һөйләмдәр араһында ҡушма һөйләмде билдәләгеҙ.**
а) Ҡайтҡан, имеш, тим.
б) Уҡымаҫас, өндәшмәне.
в) Быймаһын кейҙе, башына бүреген ҡапланы.
г) Хаталанғанын күреп ҡалып, төҙөтә һалды.

**5.** ***“Боронғолар әйткәнсә, саф алтын күгәрмәй” (М. Кәрим).*** **Эйәрсән һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ.**
а) шарт һөйләм;
б) рәүеш һөйләм;
в) ваҡыт һөйләм;
г) маҡсат һөйләм.

**6.** ***“Һунарҙа ат менмәгән, ҡулға һаҙаҡ алмаған...”*** **Был юлдарҙың ҡайһы әҫәрҙән булыуын билдәләгеҙ**
а) «Аҡбуҙат эпосынан»
б) М. Кәримдең «Үлмәҫбай» поэмаһынан;
в) «Урал» халыҡ йырынан;

г) «Урал батыр» эпосынан.

**7. Ҡол Ғәли ҡайһы башҡорт ырыуынан булыуын билдәләгеҙ**
а) мең;
б) табын;
в) әйле;
г) юрматы.

**8. «Ялан Йәркәй», «Тәфтиләү», «Сәлимәкәй» йырҙарының авторлығын кемгә ҡайтарып ҡалдыралар?**
а) Зәһир Исмәғилев;
б) Хөсәйен Әхмәтов;
в) Байыҡ сәсән;
г) Буранбай сәсән.

**9. Батыршаның батшаға яҙған хатын ғилми яҡтан кем өйрәнгән?**
а) Әхнәф Харисов;
б) Ғайса Хөсәйенов;
в) Мирас Иҙелбаев;
г) Ғиниәт Ҡунафин.

**10.** «***Һауаларға*** уҡ сойорғоттом,
Ҡарлуғасҡа тейҙе ***уҡҡынам.***
***Аяҡҡайым*** янына ҡолап төшкәс,
***Меҫкен*** ҡошто йәлләп юҡһынам » **шиғырындағы һүрәтләү сараларын билдәләгеҙ**
а) метафора;
б) йәнләндереү;
в) эмоциональ-экспрессив;
г) антитеза.

**2017/2018 уҡыу йылында башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән район кимәлендә уҙғарылған олимпиада өсөн тест һорауҙары**

**10-Р-2017**

**1. Исемдәрҙең эйәлек категорияһын белдергән һүҙҙе билдәләгеҙ:**
а) уҡыусым;
б) уҡыусылар;
г) уҡыусымын;
в) уҡыусыларҙың.

**2. "*Өсөнсө көн инде тоташ ҡар яуа...*" *(М. Кәрим)* һөйләмендә алмалар һаны ниндәй һандар менән бирелгән?**
а) төп һандар;
б) бүлем һандары;
г) тәртип һандары;
в) рәт һандары.

**3. *"Эштең әллә ҡайҙа китеп барыуы ихтимал" (Р. Солтангәрәев)* һөйләмендә алмаштың ҡайһы төркәмсәһе ҡулланылған?**
а) билдәләү алмашы;
б) күрһәтеү алмашы;
в) билдәһеҙлек алмашы;
г) һорау алмашы.

**4. *"Мөмкинлектең аҡтыҡҡы сигенәсә көрәшергә кәрәк" (Ш. Бабич)* һөйләмендәге ҡылым ниндәй ҡылым төркөмсәһенә ҡарай?**
а) сифат ҡылым;
б) хәл ҡылым;
в) уртаҡ ҡылым;
г) исем ҡылым.

**5. *"Иң алдан атлылар тигеҙ, берҙәм саф булып төштө" (Ф. Иҫәнғолов)* һөйләмендә ярҙамсы һүҙҙе табып төркөмсәһен билдәләгеҙ.**
а) бәйләүес;
б) теркәүес;
в) мөнәсәбәт һүҙ;
г) киҫәксә.

**6. Дауыт Юлтыйҙың ҡайҙа тыуғанын билдәләгеҙ**
а) Миәкә районының Туҡһанбай ауылында;
б) Шишмә районының Келәш ауылында;
в) Силәбе өлкәһенең Арғаяш районында;
г) Ырымбур өлкәһенең Юлтый ауылында.

**7. Әҙәби әҫәрҙә тел ниндәй функция үтәгәнен билдәләгеҙ**
а) герой телмәрен тыуҙырыу өсөн;
б) диалог өсөн;
в) художестволы образдар тыуыҙырыу өсөн;
г) экспозицияны һүрәтләү өсөн.

**8. М. Буранғолов «Урал батыр» эпосын ҡасан яҙып алғанын билдәләгеҙ**
а) 1917 й.;
б) 1910 й.;
в) 1945 й.;
г) 1888 й.

**9. Тәүге башҡорт романын күрһәтегеҙ**
а) Д. Юлтый «Ҡан»;
б) С. Ағиш «Нигеҙ»;
в) Һ. Дәүләтшина «Ырғыҙ»;
г) Ғ. Хәйри «Боролош».

**10. Һәҙиә Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романының жанрын билдәләгеҙ**
а) тарихи-хроника;
б) тарихи-революцион;
в) тарихи-фараз;
г) роман-эпопея.

**2017/2018 уҡыу йылында башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән район кимәлендә уҙғарылған олимпиада өсөн тест һорауҙары**

**11-Р-2017**

1. ***“Әйтегеҙсе, хәҙер миңә ни эшләргә?” (И. Абдуллин).* Әйтелеү маҡсаты буйынса һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ.**
а) хәбәр һөйләм;
б) тойғо һөйләм;
в) һорау һөйләм;
г) өндәү һөйләм.

***2. “Рысаев тау, урман юлдарын, тау араларындағы ауылдарҙы яҡшы белә”* (А. Таһиров) һөйләмендәге *<u>ауылдарҙы</u>* һүҙе ниндәй эйәрсән киҫәк булып килә?**
а) аныҡлаусы;
б) хәл;
в) тултырыусы;
г) өҫтәлмәлек.

***3. “Эште нисек башлап ебәрһәң, аҙағы ла шулай тамамлана” (Шю Янбаев)* һөйләмендә эйәрсән һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ.**
а) эйәрсән хәбәр һөйләм;
б) эйәрсән аныҡлаусы һөйләм;
в) эйәрсән рәүеш һөйләм;
г) эйәрсән кире һөйләм.

**4. Исемдәр менән бирелгән эйә менән хәбәр араһына ниндәй тыныш билдәһе  ҡуйыла?**
а) һыҙыҡ;
б) нөктәле өтөр;
г) өтөр;
в) ике нөктә.

**5. Араһында диалект һүҙе булған һүҙҙәр төркөмөн билдәләгеҙ:**
а) бала, тай, һарыҡ, китап;
б) йорт, юл, ҡашыҡ, боҫмаҡ;
г) өй, табын, урман, тау;
в) ауыл, дала, бейә, алма.

**6. Мостай Кәрим «Йылмайыу» поэмаһының формаһын нимә тип билдәләй?**
а) боронғо ҡобайыр;
б) классик поэма;
в) көнсығыш әкиәте;

г) төрки хикәйәте.

**7. Рәми Ғарипов ҡайҙа, ҡасан, ниндәй уҡыу йортон тамамлауын билдәләгеҙ**

а) 1970 йылда БДУ–ны;
б) 1966 йылда Стәрлетамаҡ техникумын;
в) 1951 йылда Бөрө techникумын;
г) 1956 йылда Горький исемендәге Мәскәү әҙәбиәт институтын.

**8.** ***«Мин тупраҡтан, ерҙән яралған, ерҙә тыуып үҫеп, ерҙә аунап, ерҙән йыйып йәнем йыр алған!»*** **Шиғри юлдарҙың авторын билдәләгеҙ**

а) Назар Нәжми;
б) Мостай Кәрим;
в) Рәми Ғарипов;
г) Тимер Йосопов.

**9. Рәми Ғарипов «Табыныу» поэмаһында нимәне фашлағанын күрһәтегеҙ**

а) батша самодержавиеһын;
б) феодаль-патриархаль ҡоролошто;
в) шәхес культын;
г) Октябрь революцияһын.

**10. Әхиәр Хәкимовҡа Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы ҡасан бирелә?**

а) 1970 й.;
б) 1999 й.;
в) 1984 й.;
г) 2010 й.